*Рәйес ҠОРБАНҒОЛОВ*

# Башҡорт тарихының көҙгөһө

Шәжәрә — башҡорттар араһында таралған яҙма сығанаҡтарҙың сағыштырмаса боронғоһо һанала. Уларҙа башҡорт тарихының мөһим мәғлүмәттәре сағылдырыла. Шәжәрәләрҙә ғәҙәттә айырым ырыуҙар тарихы ентекләп бирелә. Ә һәр башҡорт ырыуының үҙенең шәжәрәһен яҙыуын иҫәпкә алғанда, уларҙың эстәлеген дөйөмләштергәндә, тотош Башҡортостан буйынса хәл-ваҡиғаларҙы күҙ алдына килтереү мөмкинлеге тыуа.

В.С.Юматов 1848 йылда ”Оренбургские губернские ведомости” газетаһында мең ырыуы башҡорттары шәжәрәһен баҫтырып сығара һәм уның эстәлеген өйрәнеп, үҙенең күҙәтеүҙәрен, башҡорттар араһында йыйып туплаған мәғлүмәттәрен файҙаланып, ”Древние предания у башкирцев Чубиминской волости” һәм башҡа хеҙмәттәрен яҙып, киләсәк быуындарға уникаль мәғлүмәт ҡалдыра. Мең ырыуына ҡағылған барлыҡ шәжәрәләр Урҙас бей менән бәйле. Рус дворяны Василий Степанович Юматов Өфө өйәҙендә ҙур утар хужаһы була. Уның исемен йөрөткән Юматово (Йоматау) ауылы ситендә, әле тимер юл станцияһы урынлашҡан урында йәшәй. Йәш сағында ул диңгеҙ флотында хеҙмәт итә, аҙаҡ Өфө өйәҙе судьяһы вазифаһын башҡара. Отставкаға сыҡҡандан һуң егерме йылдан артыҡ үҙенең утарында йәшәй һәм Ырымбур крайы тарихы буйынса материалдар туплай, матбуғатта баҫтыра. В.С.Юматов 1556 йылдан алып 1847 йылға ҡәҙәр осорҙо тасуирлай, башҡорттар һәм башҡорт ихтилалдары тураһында мәғлүмәттәр килтерә. Ул аҙаҡ китап яҙырға йыйына, ҡыҙғаныска ҡаршы, вафаты быны башҡарырға ҡамасаулай. ”Древние предания у башкирцев Чубиминской волости” хеҙмәте үҙе үлгәндән һуң, 1848 йылдың икенсе яртыһында ”Оренбургские губернские ведомости” газетаһында донъя күрә. Меңле башҡорттары шәжәрәһенең бер вариантын тәү башлап матбуғатта сығарып өлгөрә.

Меңле башҡорттарының ”Мең һаҙаҡлы Урҙас бей шәжәрәһе” бер нисә вариантта осрай. Уларҙың эстәлектәре бер-береһенә тап килә. XVI быуат уртаһында Ҡасим ханлығы Рәсәйгә буйһондоролоп, Ҡазан ханлығына хәүеф янай башлағас, Нуғай ханлығы менән мең башҡорттары араһында һуғыш сыға. Суби-мең башҡорттары Ҡазан һәм Нуғай ханлыҡтары сигендә йәшәй. Нуғай хакимлығына ҡаршы меңле башҡорттарының көрәшен атаҡлы Урҙас бей нәҫеленән сыҡҡан ерле бейҙәрҙең береһе, әле Благовар районына ҡараған Ҡышлауҙа йәшәгән (хәҙерге Башҡорт

Тирмәһе ауылы урынында) Ҡәнзәфәр бей етәкләй. Был урында шуны әйтеү урынлы булыр: 1552 йыл октябрь айында, рустар Ҡазанды емергәс, Нуғай мырҙалары ҡурҡыуға төшә, меңлеләрҙең уларға буйһоноп йәшәгән өлөшө аптыраушта ҡала. Ни эшләргә? Рустарҙың килгәнен көтөргәме, әллә нуғайҙарға эйәреп, илде ташлап китергәме? Был мәсьәлә буйынса башҡорт бейҙәре араһында уртаҡ фекер булмай. Бәлки, нуғайҙарҙың үҙҙәренең араһында ла ике яҡлы фекер йөрөү быға тәьҫир иткәндер. Йософ хан рустарға ҡаршы көрәшһә, уның ҡустыһы Исмәғил Иван Грозный яғына ауа. Башҡорттар араһында ла кемдер Рус дәүләтенә ҡушылыу яғында булһа, кемдер элеккесә Нуғай хандары яҡлы ҡала. Шулай итеп, Ҡәнзәфәр бейгә Нуғай мырҙаларына ҡаршы ла, улар яҡлы арҙаҡлы башҡорт бейҙәре менән дә алышырға тура килә.

Шәжәрәләрҙә Ҡәнзәфәр бей үтә ҡыйыу һәм оло ихтыяр көсөнә эйә шәхес итеп һүрәтләнә. Ул халыҡты тыуған төйәкте ташлап китмәҫкә, нуғайҙарҙың өгөтләүҙәрен тыңламаҫҡа, янауҙарынан ҡурҡмаҫҡа өндәп сығыш яһай. Уның өндәмәһе дөйөм халыҡтың ынтылышына һәм теләгенә тап килә. Шәжәрәлә былай тиелә:

”И яранлар, без мындин китеб мәҡам тота алмасбыз, бу ердай ер кайдан табармыз, тиде ирсә, барча яранлары йығлашыб әйтделәр: И Ҡәнзәфәр бей, үлсаҡ мындә, терелсаҡ мындә, ярлымыз вә байымыз бары көн күрә алмасмыз; булсаҡ, юғалсаҡ, тәүәккәле аллаһ диерлар... Ҡәнзәфәр бей менән өс кеше ҡалдылар (Әммә шәжәрәлә артабан күберәк кеше һанала). Береһе Чүбүлүк, Ҡәнзәфәрҙең ҡәрендәше ирде, Урман, Томан инеләр. Ҡараман Урман илан бер туғма ирде. Ул Ҡараман, Килмәт берлан килде. Ҡараман уғлы Теңәй мында ҡалды. Әммә Аҡман мырҙалар нәҫеле ирде. Әммә ошо бу биш кеше һәммәһе аҫыл затты тордолар.

Белеңлар, гафил булмаңызлар, аҡыллы аңлар, аҡылсызның бер ҡолағынди керуб, бересенән чығар. Бөйөк имам хәҙрәттәре әйтмәнеме, уҡун, йәғни нәҫелдин белмәгән кеше батшаһ алдында сүз сүзларга ярамаҫ асыргудин (үҙ ырыуының һуңғы быуындарын) хәбәр белмәгән хакимлыҡҡа ярамаҫ, тиде.

Туғыҙ йөҙ илле алтыла ирде. Ҡаракилмәт, Аҡһаҡ Килмәт бөлгөнө булды. Ҡәнзәфәр бей, Чүбүлүк, Урман, Томан, Теңәй, Аҡман бында ҡалдылар, Өс Олуғҡа яһаҡ түләп торҙолар. Ошо ерҙән ташып яһаҡ түләп торҙолар. Аҙ ғына халыҡ ни ҡылһындар. Унан Ҡазанды калта Иван алды” (Һуңғы йылдарға тиклем шәжәрәне өйрәнеүселәр ”калта” һүҙен ”Калита Иван” тип уҡып, шәжәрәнең авторы яңылышлыҡ ебәргән тип аңлаттылар. Р.Булгаков менән М.Нәҙерғолов ”Башкирские родословные” хеҙмәтендә ”калта” һүҙе автор тарафынан яҙылып бөтмәгән ”ҡалтаҡ” тигәнде аңлата, ”ни хәл итәһең, Ҡазанды Иван алды” мәғәнәһендә, тип төҙәтмә бирҙеләр). Унан һуң рәхимле батшаға баҡтылар. Туғыҙ йөҙ алтмыш бердә ирде... Ҡазанны рус алды, һүҙ күп ине, мөхтасар ҡылдыҡ” (йәғни, һүҙҙе тамамланыҡ).

Шулай итеп, шәжәрәлә Ҡәнзәфәр (Ҡәзанфәр) бей менән бирелә ҡалған мең ырыуы башлыҡтары теҙеп яҙыла. Нуғайҙарға эйәреп китеүселәр араһында күренекле шәхестәрҙән Ҡараман ғына була. Бер туған Урман ҡала, Ҡараман китә, ә уның улы Теңәй ҡала. Меңлеләрҙең күпсе-

леге тыуған илдәрендә ҡала, киткән башҡорттарҙың да күбеһе кире ҡайта, ә бирелә ҡалған нуғайлылар ерле халыҡ араһында ассимиляциялана.

Ҡазан буйһондоролғандан һуң Иван IV Иҙел-Урал регионындағы халыҡтарға өндәмәләр тарата. Халыҡты тыуған ерҙәрен ташлап китмәҫкә, үҙ ихтыярҙары менән Рус дәүләте составына керергә саҡыра. Азатлыҡ, шул иҫәптән дин тотоу буйынса үҙаллылыҡ һәм төрлө ташламалар бирергә вәғәҙә итә.

Һуңыраҡ исеменә ”Яуыз” ҡушаматы тағылған Иван IV батшаның былай эш итеүе уның ҡан эскес кенә түгел, ә хәйләкәр, ваҡиғаларҙы алдан күрә белеү һәләтле, мәғлүмәтле дәүләт етәксеһе булыуын да күрһәтә. ”Мең башҡорттары падишаһ Иоанн Васильевич Грозныйға үҙҙәренең ышаныслы дүрт кешеһен ебәрҙеләр” тигән юлдарҙы уҡыйбыҙ (В.С.Юматов. Күрһәтелгән хеҙмәт). ”Башҡа уңайлы юл булмағанлыҡтан, илселәр Ҡазанға саңғыла баралар”. Шәжәрәлә илселәрҙең составы күрһәтелмәгән, әммә тикшереүселәр (Р.Ғ.Кузеев), башҡа документтарҙың эстәлеген өйрәнеп, илселәр араһында Ҡәнзәфәр бейҙең үҙенән башҡа Чүбүлүк, Урман, Томан, йә булмаһа һуңғыһы урынына Теңәй барыуы ихтимал, тип фаразлайҙар. ”Падишаһ илселәрҙе бик йылы ҡабул итә, башҡорттарҙы үҙ ҡул аҫтындағы халыҡтар иҫәбенә керетергә ризалаша” (В.С.Юматов. Күрһәтелгән хеҙмәт). Илселәр, ”Аҡ батшаның” үҙен күрҙек, тип белдерәләр. Ә ысынында иһә илселәрҙе батша исеменән уның наместнигы ҡабул итә. Шәжәрәлә наместниктың исем-шәрифтәре әйтелмәгән, әммә тарихтан билгеле булыуынса, тәүге осорҙа Ҡазанда Иван IV батшаның наместнигы кенәз Петр Шуйский була.

”Падишаһ меңлеләрҙән илдәрендә ниндәй байлыҡтар барлығын һорашып, башҡорттарға еңел генә яһаҡ һала — кемгә төлкө, кемгә һуҫар тиреһе, ә кемгә бал менән түләргә ҡуша һәм ер бирә” (В.С.Юматов. Күрһәтелгән хеҙмәт). Батша ҡаҙнаһына яһаҡ түләүҙән тыш, башҡорттар үҙ иҫәптәренә хәрби хеҙмәттә торорға тейеш булалар. Яһаҡтың күләме ҙур булмай. Меңлеләр өлөшөнә 171 һуҫар тиреһе һәм 18 батман бал биреү төшә. Башҡорттар араһында ҡулланылған Ҡазан батманы 10 ҡаҙаҡҡа тура килә.

Иван IV башҡорттарға ер биләүгә грамоталарҙы дәүләт мәнфәғәттәренән сығып тарата. Рус дәүләтенең көнсығыш сиктәрен һаҡларға ышаныслы хәрби көс кәрәк була.

Рус дәүләтенә ҡушылыу ниндәй характерҙа булғанлығы хаҡында һүҙ барғанда, тарихсылар һәм тикшеренеүселәр араһында фекер айырымлыҡтары йәшәп килә. Берәүҙәр, рустар башҡорттарҙы көс ҡулланып яулап алдылар, тип яҙһалар, икенселәре уларҙың Рус дәүләтенә үҙ ихтыярҙары менән ҡушылыуын иҫбат итәләр. Был мәсьәлә буйынса тарихсылар ул саҡтағы Башҡортостандың бер бөтөн дәүләт хасил итмәгәнлеген иҫәпкә алмайҙар. Улар үҙҙәренең тикшеренеү һөҙөмтәләрен идеология ҡалыптарына тап килтерергә тырыша. Рустар тарафынан Ҡазан емерелгәндә Көнбайыш башҡорттары Ҡазан ханлығы ҡулы аҫтында ҡала, меңлеләр — өлөшләтә Ҡазан, өлөшләтә Нуғай ханлығы хакимлығында, ә Урал аръяғында йәшәгән башҡорттар Себер ханы Күсемгә буйһоналар. Ул ваҡиғаларға ҡәҙәр Ҡазан ханлығына ҡараған башҡорттар Ҡазан рустар тарафынан емерелгәндән һуң үҙҙәрен яулап алынған тип һанайҙар һәм ҡаршылыҡ күрһәтмәйенсә рус батшаһы ҡулы аҫтында

ҡалалар, рус хөкүмәте менән үҙ-ара мөнәсәбәттәрен килеп тыуған хәл-ваҡиға шарттарында урынлаштыралар. ”Рус йылъяҙмасылары фекеренсә, Ҡазанды алыу бөтөн дәүләтте яулап алыуға тиң була” (Булат Хәми-ҙуллин. Ҡазан ханлығы халыҡтары. Ҡазан: Татарстан китап нәшриәте, 2002. 271-се б.).

1552 йылдың октябрь айында, рус ғәскәрҙәре Ҡазанды алғандан һуң, артабан нисек эш итеү юлын асыҡлау маҡсатында Иван IV кәңәшмә йыя. Кәңәшмәлә ҡатнашҡан кенәз А.М.Курбский яҙмаларына таянып, Ә.Н.Усманов: ”Ҡазан крайы халыҡтарын тамам буйһондороу мәсьәләһендә Мәскәү баярҙары араһында бәхәс тыуған”, — тип яҙа. Берәүҙәр ҡорал ҡулланып буйһондорорға тәҡдим итәләр. Бының өсөн ”Иван IV ҡыш-лау өсөн Ҡазанда тороп ҡалырға һәм ул мосолман ғәскәрен (”воин-ства басурманства”) ҡырып бөтөрөү менән шөғөлләнергә тейеш”, тип әйтәләр. Әммә батша уларҙың кәңәшен тыңламай, ғәскәренең төп өлөшөн ауылдарға таратып, үҙе Мәскәүгә ҡайтып китә. Китер алдынан, элекке Ҡазан ханлығы халыҡтарына грамоталар менән (”с жалованными гра-мотами”) мөрәжәғәт итә. Үҙ ихтыярҙары менән рус подданныйлығын алырға һәм Мәскәү хөкүмәтенә яһаҡ түләп йәшәргә саҡыра (кенәз Андрей Курбский яҙмаларынан).

Ләкин Ҡазан ханлығын буйһондороу менән тыныслыҡ урынлашҡан тип әйтеп булмай. 1553 йылдың мартында кенәз Александр Горбатов-тың Мәскәүгә хәбәр итеүенә ҡарағанда, Ҡазандың Ялан яғында йәшәүселәр яһаҡ йыйыусыларҙы туҡмап ҡайтаралар (”Казанские люди Луговой сто-роны ясатчиков побили”). Тиҙҙән 15 меңләп баш күтәреүселәр һәр тарафта рус ғәскәрҙәренә ныҡлы ҡаршылыҡ күрһәтәләр. Ә 1556 йылда мари кенәзе Мамыш-Берде мари һәм сыуаш халҡын яуға күтәрә.

Күрһәтелгән мәғлүмәттәрҙән сығып, шундай һығымта яһарға мөмкин:

— Ҡазан ханлығын тар-мар иткән осорҙа ла, Бүздәк бей етәкселе-гендәге төрлө ырыу башҡорттарҙың һәм ғәйнә ырыуы башҡорттары-ның Ҡазанға ярҙамға барыуын иҫәпләмәгәндә, аҙаҡ баш күтәреүҙәрҙе баҫтырған осорҙа ла рус ғәскәрҙәре менән башҡорттар араһында ҡоралды ҡаршы тороу булмай;

— Рус ғәскәре башҡорттар йәшәгән ерҙәргә, Ҡазан ханлығы соста-вындағы ерҙәрҙе иҫәпләмәгәндә, баҫып кермәй.

### Ҡазанға башлап кем бара?

Рус дәүләте подданныйлығына керергә ризалыҡ белдереп, тәү баш-лап Ҡазанға ҡайһы ырыу вәкилдәре барғанлығы тураһында тарихсы-лар тарафынан төрлө фекер әйтелә. Ҡазан ханлығы территорияһында йәшәгән көнбайыш башҡорттарының, шул иҫәптән меңлеләрҙең бер өлөшөнөң, Рус дәүләтенә башлап ҡушылыуҙары йышыраҡ иҫкә алына.

Ҡазан ханлығында көн иткән көнбайыш башҡорттары рус батшаһы ҡулы аҫтында, ханлыҡ ҡолағас, ”автоматик рәүештә” тороп ҡалалар. Рус хөкүмәте көнбайыш башҡорттарына, оҙаҡҡа һуҙмайынса, айырым ташламалар яһай. Башҡорттарҙың ер хоҡуҡтары сикләнмәй, оҙаҡ ҡына ваҡыт рус хөкүмәте башҡорттарҙың эске идара итеү мәсьәләләренә лә ҡыҫылмай, тәүге осорҙа диндәрен дә эҙәрлекләмәй, халыҡтың ғөрөф-ғәҙәте һәм традициялары менән килешеп йәшәй.

Ҡазан ханлығы һәм Нуғай урҙаһы араһындағы сиктең бер өлөшө әлеге беҙҙең Благовар районы территорияһы аша үтә. Был сиктән Ҡәнзәфәр бейҙең ҡышлауына тиклем ара (әле Башҡорт Тирмәһе ауылы территорияһы) 10—12 саҡырымдан артмай. Күрше ырыу башҡорттары (ҡаршындар һәм меңлеләр) үҙ-ара килешеп йәшәйҙәр. Ата-бабаларыбыҙҙың һөйләп ҡалдырыуҙарына ҡарағанда, Туған йылғаһының башланған ерендә (әлеге Табулдаҡ ауылы тирәһе) бергәләп байрамдар, йыйындар уҙғаралар. Йылғаның атамаһы ла шунан килә, тип һөйләйҙәр ине беҙҙең олатайҙар — ”туған”, ”туғанлыҡ” һүҙҙәренән. Рус дәүләте составында ҡалған ут күршеләре ҡаршын башҡорттары менән рус властарының ниндәй мөғәмәләлә булыуҙарын мең башҡорттары үтә ҡыҙыҡһынып күҙәтеп торғандар, тип әйтергә нигеҙ бар. Был хаҡта шәжәрәлә лә яҙылған. Ул турала Рычков та яҙып ҡалдырған. Шәжәрәгә таянып, В.С.Юматов былай яҙа: ”Меңле башҡорттары, рустарҙың Ҡазанды алыуҙарын һәм буйһондоролған халыҡтарға ҡарата ғәҙел мөнәсәбәттә булыуҙарын ишетеп, падишаһ Иоанн Васильевич Грозныйға үҙҙәрен подданныйлыҡҡа алыуҙарын һорап, дүрт кешенән торған вәкиллек ебәрҙеләр”. Меңле шәжәрәһендә Ҡазанға барыуҙың аныҡ датаһы күрһәтелә: ”Туғыҙ йөҙ алтмыш бердә ирде...” Һижри йылды милади йылға күсергәндә, 1553—1554 йылдарға тура килә. Тимәк, вәкилдәр 1553 йылдың ахырында, бәлки 1554 йыл башында Ҡазанда булалар. Рус подданныйлығын ҡабул иткән башҡа ырыуҙарҙың шәжәрәләрендә бынан да иртәрәк датаны күрһәткән мәғлүмәт әлегә осрағаны юҡ.

Һижри менән 964 йылда (1556—1557 йылдарға тура килә) падишаһ Иван Васильевичтың саҡырып килтереүе буйынса Тамъян улусынан — Шәғәли Шаҡман, Үҫәргән улусынан — Бикбау, Ҡыпсаҡ улусынан Мешәүле Ҡараҡужаҡ Ҡазанға баралар һәм үҙҙәренең буйһонғанлыҡтарын белдерәләр, үлсәп, сиктәрен күрһәтеп, ергә хоҡуҡтарын теркәүҙе һорайҙар (Р.М.Булгаков, М.Х.Надергулов. Башкирские родословные. Уфа: ”Китап”, 2002. С.7).

Тарихсы Ә.Н.Усманов: ”Башҡортостандың Рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыуы” китабында: ”...меңлеләрҙән һуң, яҡынса шул уҡ осорҙа, меңлеләрҙең көнсығыш күршеләре — юрматы ырыуы башҡорттары рус подданныйлығын ҡабул иттеләр”, — тип яҙа. (Уфа: Башкирское книжное издательство, 1982. С.141).

Һүҙ ҙә юҡ, көнбайыш башҡорттарының рус подданныйлығын тыныс шарттарҙа ҡабул итеүҙәре, рус властарының буйһонған халыҡтарға ҡарата ғәҙел мөнәсәбәттә тороуҙары мең ырыуы башҡорттарының Нуғай ханлығы составындағы өлөшөнә лә ыңғай тәьҫир иткән. Ысынлап та, рус власы йөҙ йылдан артыҡ ваҡыт элек биргән вәғәҙәләрҙе боҙмай, ә башҡорттар алған йөкләмәләрҙе теүәл үтәйҙәр.

Шулай итеп, төп сығанаҡтарҙан һаналған шәжәрәләргә һәм ата-бабаларыбыҙҙан телдән-телгә күсеп килгән риүәйәттәргә таянып, мең башҡорттарының Рус дәүләтенә үҙ иректәре менән ҡушылыуы хаҡында әйтергә мөмкин. Мең башҡорттары башлығы Ҡәнзәфәр бей етәкселегендәге вәкилдәр башҡорт һәм рус хөкүмәте араһында тәүге килешеү төҙөйҙәр. Әлеге Благовар районы Башҡорт Тирмәһе ауылы Ҡәнзәфәр бейҙең тыуған төйәге һанала.

Башҡорттар менән рус хөкүмәте араһында беренсе рәсми килешеү төҙөү — Башҡортостан тарихында киҫкен үҙгәреш моменты. Был үҙгәреш Башҡортостан тарихын яңы юлдан алып китә. Ауыр һәм буталсыҡ мәлдә Ҡәнзәфәр бей үҙен аҡыллы етәксе, алдан күрә белеү һәләтенә эйә булған дәүләт эшмәкәре итеп таныта, ҡатмарлы осорҙа ваҡиғалар йүнәлешен дөрөҫ хәл итә.

Район хакимиәте башлығы А.З.Сәләхов башҡорт халҡының күренекле юлбашсыһы һаналған тарихи шәхестең исемен мәңгеләштереү буйынса тәҡдимде күтәреп сыҡты. Ҡәнзәфәр бейҙең тыуған ерендә, район территорияһында уға һәйкәл ҡуйыу, шәхестең исемен йөрөткән ял паркы булдырыу күҙҙә тотола. Республика етәкселеге был башланғысты — яҡлап, ә район халҡы күңелле хәбәрҙе хуплап ҡаршы алды.

## Мең ырыуы шәжәрәләре

Һуңғы осорҙа башҡорт шәжәрәләрен эҙләү, өйрәнеү һәм матбуғатта баҫтырыу йәнләнә. Быға 1960 йылда Р.Ғ.Кузеевтың 25 документты эсенә алған ”Башҡорт шәжәрәләре” китабын баҫтырып сығарыуы ла этәргес була. Автор хеҙмәтенә эстәлекле инеш һүҙ, аңлатмалар яҙа, төрки теленән үҙе тәржемә яһай.

2002 йылда ”Китап” нәшриәтендә Р.М.Булгаков һәм М.Х.Нәҙерғолов тарафынан әҙерләнгән, 27 документты эсенә алған ”Башкирские родословные” китабы донъя күрҙе. Был хеҙмәт башҡаларҙан рус телендә баҫылыуы һәм тәржемә ваҡытында элекке ғалимдар тарафынан ебәрелгән етешһеҙлектәрҙе төҙәтеү менән айырыла.

Башҡорт шәжәрәләре араһында Урҙас бей исеме менән бәйле мең ырыуы шәжәрәһе айырыуса мөһим урын алып тора. Бей тарихҡа ”Мең һаҙаҡлы Урҙас бей” исеме менән кергән.

Мең шәжәрәләре бер нисә вариантта осрай. Урҙас бей исеме менән бәйле шәжәрәләрҙең барыһы ла мең ырыуына ҡарай. Урҙас бейҙән Ҡәнзәфәр бейгә ҡәҙәр булған ара Р.Ғ.Кузеев килтергән бер версияла түбәндәге тәртиптә килә:

Мең һаҙаҡлы Урҙас бей, уның улы Улан бей, артабан шул тәртиптә Ҡусҡар бей, Боға бей, Болғаҡ бей, Болот бей, Уға бей, Санғусин бей, Сасбоға бей, уның улдары Чү бей, Муса бей — икеһе бер туған, Муса улы Ҡәнзәфәр бей. Шәжәрәләрҙең варианттарында Ҡәнзәфәр бейҙең атаһы Муса — Бикмус, Бикмуш тип тә килтерелә.

Урҙас бейҙең исеме ”Мең һаҙаҡлы Урҙас бей” (Мең садаҡлы Урдас бей) булып йөрөүен, шәжәрә текстарына ҡарап, былай аңлаталар: ”...унан Сыңғыҙ хан Урдас бейгә әйтте: ”Әй, Мең садаҡлы Урдас, йәғни мең тимәклик андин ҡалды.” Урдас бей ғәйәт бай кеше ине. Орошка чыкар булһа, мең садаҡлы кеше менән берлән чыкар ине. Сыңғыҙ хан Урдасҡа әйтте: ”Һинең ағасың ҡайын булһын, ҡошоң ҡарсыға булһын, ораның ”алач” булһын, тамғаң ”Ҡош ҡабырғаһы” булһын”, — тине, — сифаты будыр”. Тимәк, уның ғәскәре мең кешенән торған. Р.Булгаков менән М.Нәҙерғолов ”Тысячеколчанный Урадач бий”, тип исеменә тәржемә бирәләр. Әммә исемдәге ”садаҡ” һүҙен ”һаҙаҡ” тип кенә түгел, ә төркисә ”һыбайлы” (жайдаҡ, сайдаҡ) тип тә аңлатырға мөмкин.

Меңле шәжәрәһе ике бүлектән тора. Беренсе бүлеге 1567 йылдан һуң, меңлеләргә аҫабалыҡҡа ер беркетелеүе хаҡында грамота алғас яҙылған. Икенсе бүлеген Янбаҡты кенәз яҙған, тип иҫәпләнә.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шәжәрәнең беренсе бүлегенең авторы билдәһеҙ һәм уның төп нөсхәһе табылмаған. Шул сәбәпле айырым тарихсылар тарафынан шәжәрәнең яҙылыу ваҡыты шик аҫтына алына. Әммә шәжәрәлә шик юҡ, сөнки мең башҡорттары ер мәсьәләһе буйынса һәр килеп тыуған осраҡта уға таянып эш иткәндәр. Иван IV биргән грамотаға башҡорттар ҙур хоҡуҡтарға эйә булған дәүләт акты тип ҡарайҙар, ә рәсми властар быны раҫлайҙар. Грамоталарҙы иң ҡиммәтле документтар рәтенә ҡуйып һаҡлайҙар. Грамота тексы йәки уның эстәлеге шәжәрәләргә ингән. Шәжәрәнең икенсе бүлеге Ҡәнзәфәр бейҙең ейәне Янбаҡты кенәз тарафынан, беренсе бүлек мәғлүмәттәренә таянып, уның дауамы итеп 7179 йылда (иҫке рус йыл иҫәбенсә) яҙылған. 1671 йылда меңлеләр ун бер ырыу араһында ер бүлешкәндә лә шуға таянып эш иткәндәр. Әгәр ҙә мәгәр 1671 йылда ер бүлешкәндә 1567 йылда бирелгән грамота булмаһа, ер бүлешеү ғәмәле тормошҡа ашмаҫ ине. Унан һуң да, кәрәге сыҡҡанда, документҡа таянып эш иткәндәр. Әйтәйек, В.С.Юматов алда күрһәтелгән хеҙмәтендә 1784 йылдың 16 июнендә Суби-мең улусы поход старшинаһы Әхмәр Ҡорбанғоловтың Ырымбур граждандар палатаһы архивынан ун бер ырыу араһында ер бүлешеү тураһындағы документтың раҫланған күсермәһен алыуы тураһында яҙа.

Артабан Р.Ғ.Кузеев үҙенең тәүге хеҙмәттәренең береһендә, шәжәрәнең беренсе бүлеген дә Янбаҡты яҙа башламанымы икән, тигән фекер әйтә. Әммә ул да 1960 йылда нәшер иткән ”Башҡорт шәжәрәләре” хеҙмәтендә шәжәрәләрҙәге байтаҡ хаталарҙы, етешһеҙлектәрҙе дөрөҫләп, аңлатып бирһә лә, был урынын уйлап бөтөрмәгәндер, күрәһең. Янбаҡты — Ҡәнзәфәрҙең ейәне, XVII быуаттың икенсе яртыһында йәшәгән, иҫке рус йыл иҫәбе буйынса 7179 (1671—1672) йылда икенсе бүлеген яҙғанда оло йәштәге шәхес булған — ҡустыһы һәм документ төҙөшөрлөк еткән улы шәжәрәгә индерелгән. Ысынлап та, Һарайлы ауылынан Ҡорбанғәлиевтар тоҡомонда һаҡланған шәжәрәнең беренсе бүлеге һижри менән 258 йылда яҙылған, тип әйтелгән һүҙҙәр бар, был әлеге йыл иҫәбендә 1551 йылға тура килә. Ошолай булғас, уны Янбаҡты кенәз яҙа башлауы ихтимал, тип фараз итеү хата булыр. Янбаҡты кенәздең уны рәткә килтереп, яңынан яҙыуы ғына мөмкин.

1765—1769 йылдарҙа Ырымбур губернаторы вазифаһын башҡарған А.А.Путятин яҙыуына ҡарағанда, Өфө провинциаль канцелярияһында һаҡланған грамоталарҙың күсермәләре 1759 йылда янғын ваҡытында юҡҡа сығыуы ихтимал. Мең башҡорттарына бирелгән грамотаның да төп нөсхәһе һәм һаҡлауға тапшырылған күсермәләре шунда һәләк булыуы мөмкин.

Ғөмүмән, шәжәрәләр яҙыуҙың ҡыҫҡаса тарихын иҫкә төшөрөү урынлы булыр. Беренсенән, шәжәрәләр хәл-ваҡиғалар булып үткәндән һуң байтаҡ ғүмер уҙғас, ҡыҫҡаса алып барылған яҙмаларға, телдән-телгә күсеп килгән ата-бабалар риүәйәттәренә таянып яҙылған. Икенсенән, ваҡыт уҙыу менән улар (ҡульяҙмалар) күсереп яҙылған, ишәйтелгән. Хаталар ебәрелгән, ҡайһы бер хәл-шарттар буталып, онотолған һәм хәтергә төшөрөп яҙылған һ.б. Хәҙер меңлеләр шәжәрәләренең кем тарафынан нисәнсе йылдарҙа күсерелеүенә күҙ һалайыҡ. Хәтергә

төшөрәйек, мең ырыуына ҡағылған барлыҡ шәжәрәләрҙең дә беренсе бүлектәре бер төрлө һәм уның авторы берәү генә булыуына шик юҡ.

Һарайлы-мең шәжәрәһен Ғөбәйҙулла 1817 йылдан һуң яҙғаны, Илекәй-Мең волосы нәҫел ағасы күсермәһе 1893 йылда, Урҙас бейҙән алып Мусаға ҡәҙәр Мең волосы нәҫел ағасын есаул Миңлеәхмәт Муллағәли улы Ибраһимов 1896 йылда, Һарайлы ауылындағы шәжәрә һижри менән 1281 (1861—1864) йылдарҙа Һарайлы-Моталлип ауылы муллаһы Ниғмәтйән Ҡорбанғәли улы тарафынан күсерелгәнлеге һәм аҙағына үҙҙәренең ырыу тарихынан мәғлүмәттәр өҫтәүе билдәле. Ер беркетелеүгә грамота алғандан һуң, XVI быуаттың икенсе яртыһынан XIX быуаттың икенсе яртыһына тиклем 300 йылдан артыҡ ваҡыт уҙған. Был осорҙа Петр I тарафынан 1708 йылдан һуң индерелгән яңы календарь халыҡтың аңына ныҡлап һеңгән, бөтөн ғәмәлдәр милади йыл иҫәбе менән алып барылған, һижри йыл менән эш итеү аҡрынлап юйылған, онотолған. Шик юҡ, тәүге автор, моғайын, үҙенең хеҙмәтендә һижри менән йә 974, йә булмаһа 975 йылды, йәки иҫке славянса 7075 йылды күрһәткән булғандыр. Тимәк, 1567 йыл датаһы менән ризалашырға мөмкин. Ҡабатлап хәтергә төшөрәйек, был тәүге грамота нигеҙендә мең башҡорттары нисәмә йөҙ йылдар үҙҙәренең дәүләт кимәлендә ҡарала торған мөһим мәсьәләләрен хәл итеп килгәндәр. Тимәк, шикләнмәгәндәр.

Шәжәрәләрҙәге йәнә бер үҙенсәлекте ҡарап үтәйек. Ер 1567 йылда иҫән булған Ҡәнзәфәр бейҙең дүрт улы — Ҡужабаҡты, Хоҙайбаҡты (Байбаҡты), Дистан һәм Ҡадашҡа, Урман улы Уразлыға, Чүблүк улына, Аҡман улы Аҡкундыға һәм башҡаларға бирелә, һижри менән 956 йылда (1549), йәғни нуғайҙар менән низағ килеп сыҡҡан йылда, Ҡәнзәфәр бейҙең бик йәш булғанлығы әйтелә. Унан һуң 18 йыл ғүмер уҙған, дүрт улы үҫеп еткән, тимәк, ер грамотаһының улдары исеменә бирелеүе бик тә урынлы. Ә киләсәктә шәжәрәне һәм грамотаны файҙаланыусылар — тәүге ер хужаларының вариҫтары — грамотаға керетелгән исемдәрҙе һәм документ төҙөлөү датаһын күсереп яҙғанда иҫкесә ҡалдыралар. Шәжәрәнең икенсе бүлеген яҙыусы, Ҡәнзәфәр бейҙең ейәне кенәз Янбаҡты ла үҙенең юлдаштары менән Мәскәүгә иҫкесә 7179 йылда барып, милади йыл менән 1671 йыл ун бер ырыу араһында ер бүлешеү тураһында документ төҙөп, датаһын, 9 февралдә яҙылды, тип ҡуя. Шәжәрәне барлыҡ күсереп яҙыусылар ҙа шул уҡ датаны ҡулланалар. Һуңынан күсереп яҙыусылар бөтә күсермәләргә лә тәүҙә ер бүленгән датаны ҡуя, текста аталарына бирелгән ерҙәрҙең сиктәрен күрһәтә.

Меңлеләр шәжәрәһенең икенсе бүлеге XVII быуат ахырында Ҡәнзәфәр бейҙең ейәне кенәз Янбаҡты тарафынан яҙылған, тип әйттек. Унда мең башҡорттарының ун бер ырыу араһында ер бүлешеүе тураһында хәбәр һәм бирелгән ерҙең сиктәре күрһәтелгән грамотаның тексы бирелә:

”Бадшаһ олуғ кенәз Алексей Михайлич заманында көчласмаскә ерлар бүлешәләр. Кем яҙҙы диб сурасаңыз, мин кенәз Янбаҡты яҙҙым. Кем менән диб сурасаңыз, энем, улым менән. Васыятым: аңлаған аҡыллы торор, аҡылсыҙның бер ҡолағындин керүб, бересендин чығыр.

Әүәл Ҡәзанфәр бейҙең дүрт улы бар: 1-сеһе Ҡужабаҡты, 2-сеһе Ходайбаҡты, 3-сөһө Ҡоҙаш, 4-сеһе Дистан, йәнә Чүблүктең 4 улы бар: 1-һе Яйыҡ Сыбы, 2-сеһе Ҡәҙер Сыбы, 3-сөһө Миңле Сыбы, 4-се улы

Иҙел Сыбы, йәнә Аҡкунды Аҡман улы, Уразлы Урман улы, Мәмбәтҡол Теңәй улы. Рәхимле батшаға дүрт кеше ебәрҙеләр Мәскәүгә книгаға ялғатмәгә: Янбаҡты кенәз Ҡоҙаш улын, 2-сеһе Яйыҡ Сыбы улы Ҡамасыҡ, 3-сөһө Уразлы Урман улы, 4-сеһе Мәхмүд Дистан улы юлдашлары менән, тарих 1567 йылда.

Рәхимле олуғ батшабыҙға түләй торған яһағыбыҙ 171 һуҫар, 18 батман бал. Тарих яҙылды 1567 йыл. Февралдең 9-сы көнө рәхимле олуғ батшабыҙҙың әмере берлан книгага ялғаттыҡ. Дьяк Андрон Кузьмин күсереп яҙған. Ҡул ҡуйған. Подьячий Иван Павлов яҙған. 1567 йыл майҙың 20-се көнөндә ине. Яһаҡ түләй торған башҡорттар: кенәз Янбаҡты Ҡоҙаш уғлы, Уразлы Урман уғлы, Мәхмүд Дистан уғлы, Ҡамасыҡ Яйыҡ Сыбы уғлы юлдаштары менән. Мең иленең Янбаҡты кенәз яҙҙым".

Был ун бер ырыу араһында ер бүлешеү документының герблы ҡағыҙҙағы 1729 йылда раҫланған күсермәһе Өфө архивында һаҡланған, әммә аҙаҡ Өфө провинциаль канцелярияһында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт табылмаған. Төп нөсхәһенең раҫланған күсермәһе канцелярист Шергин тарафынан раҫланған. Йыл иҫәбен алып барыуҙың яңы стиленә күскәндән һуң был, бәлки, тәүге рәсми күсермә булғандыр. "Был документ Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты архивы фондында һаҡлана", — тип яҙҙы Р.Кузеев.

Беҙҙең районның Һарайлы (Һарайлы-Моталлип) ауылында һаҡланған икенсе бер вариантында (Биккенә нәҫеленән Шәйхетдин (1854—1941) күсергән кесе варианты) ун бер ырыу араһында ер бүлешеүҙең сиктәре күрһәтелгән грамота тексы килтерелә.

Грамота тексында шәжәрәлә күрһәтелгән мәғлүмәтте ҡабатлауҙар осраһа ла, тексты тулыһынса килтереүҙе урынлы таптым, сөнки башҡорт телендә ер бүлешеү грамотаһының нәшриәттә тулы тексына осрағаным юҡ.

## ГРАМОТА

**Падишаһым олуғ кенәз Әләксәй Михайлович. Ул Ҡәзанфәрҙең дүрт улы: оло улы — Ҡужабаҡты, икенсе улы — Дистан, өсөнсө улы — Байбаҡты, дүртенсе улы — Ҡоҙаш бей. Йәнә Чүблүктең дүрт улы: әүүәл олуғ улы — Яйыҡ Сыбы, икенсе улы Ҡадир Сыбы, өсөнсө — Миңле Сыбы, дүртенсе улы Иҙел Сыбы.**

**Йәнә Уразлы Урман улы, Мәмәтҡол Тыңлый улы, вә йәнә мин — Аҡкунды Аҡман улы. Беҙ ун бер кеше бүлештек рәхимле олуғ падишаһтың ярлыҡап биргән ерен, шул шарт менән бер-беребеҙҙең еренә көс итмәҫкә. Был шарт буйынса татар хаты яҙып биреп ебәрҙек олуғ падишаһтың хәҙрәтенә — Мәскәүгә, кнәгәгә һалырға тип.**

**Ул хатыбыҙҙы бирҙек Мәскәүгә илтергә тип, Янбаҡты кенәз Ҡоҙаш улына, Уразлы Урман улы, Мәхмүт Дистан улы, Ҡамасыҡ Яйыҡ Сыбы улы, юлдаштары менән, 1567 йыл килделәр падишаһҡа. Янбаҡты кенәз Ҡоҙаш улы, Уразлы Урман улы, Мәхмүт Дистан улы, Ҡамасыҡ Яйыҡ Сыбы улы, юлдаштары менән килеп, бирҙеләр миңә татар хаты.**

**Шундай, әүүәл мин — Ҡужабаҡты алдым: Уйҙан тамағынан түбәнгеһен, Өршәктең ике яҡ һыу ағышы, Мөсәйлин буйын урманыяланы менән алдым.**

**Йәнә мин — Дистан алдым Дим буйын, Чукраҡлы тамағынан үрҙе, Ярыш тамағына саҡлы, ике яҡ һыу ағышын, урманы-яланы менән. Өршәктән сыҡкан һыу ағышына бармаҫҡа.**

**Йәнә мин — Байбаҡты алдым Дим буйын, Чукраҡлы тамағынан түбәнде, Иҙелгә саҡлы — ике яҡ һыу ағышы менән, урманы-яланы менән.**

**Йәнә мин — Ҡоҙаш бей алдым Уйҙан тамағынан юғарыны: Борулы ҡул тамағына саҡлы, ике яҡ һыу ағышы менән, урман-яланы менән һәм Уйҙан буйын, Ташкисеүгә саҡлы, ике урмандың араһы менән, Ҡондоҙло күлдән Ауырғазыға саҡлы һәм Ауырғазыға тиклем Ерекле күлен. Бороулы ҡул башына саҡлы бүләктәре менән.**

**Йәнә Чүблүк улы мин — Яйыҡ Сыбы алдым Ярыш тамағынан үрҙе, Дим буйын — ике яҡ һыу ағышы менән. Ярыштан Биштирәк тамағына саҡлы, Өршәк һыу ағышына бармаҫҡа.**

**Йәнә мин — Ҡадир Сыбы алдым: Уфа Иҙеленең буйын, Ҡарғун тамағына саҡлы, ике һыу ағышы менән, Лабу буйын башына саҡлы, ике яҡ һыу ағышы менән.**

**Йәнә беҙ — Иҙел Сыбы, Миңле Сыбы — ағалы-энеле икебеҙ алдыҡ Ҡармасан тамағынан Иҙелдең ике яҡ һыу ағышы менән.**

**Йәнә беҙ — Уразлы Урман улы, Мәмәтҡол Теңәй улы — ағалы-энеле икебеҙ алдыҡ: Дим буйын Биштирәк тамағынан үрҙе, Ярыш тамағына саҡлы, ике яҡ һыу ағышы менән, урманы һәм яланы менән.**

**Йәнә мин — Аҡкунды Аҡман улы алдым: Түрсекләзинең башынан тамағына саҡлы, Ауырғазыны Кесе Ҡондоҙло күле менән ике яҡ урман араһын, Ташкисеүҙән юғарыны, Иҙел сыҡкан һыу ағышы менән.**

**Йәнә беҙ — Миңле Сыбы, Иҙел Сыбы ағалы-энеле икебеҙ алдыҡ: Ярыш тамағынан үрҙе, Дим башына саҡлы, ике яҡ һыу ағышы менән, урман-яланы менән.**

**Йәнә мин — Байбаҡты алдым: Иҙел арғы яғын урманы менән, Көрт буйын.**

**Йәнә мин — Уразлы алдым Мәмәтҡол энем менән: Иҙелдең арғы яғын, Сурмаш, Тауыш буйын.**

**Йәнә мин — Ҡоҙаш алдым: Уфа Иҙеле тамағынан түбәнде, Аҡ Иҙелдең буйын Ҡармасан тамағына саҡлы, ике яҡ һыу ағышы менән, урман-яланы менән.**

**Йәнә мин — Аҡман улы Аҡкунды алдым: Өршәк башын, муйыл урманы менән.**

**Йәнә мин Яйыҡ Сыбы алдым: Асав буйын, урманы-яланы менән.**

**Йәнә мин — Дистан алдым: Ҡармасан буйын, урман-яланы менән, ике яҡ һыу ағышы менән, һәм Ҡазан тау, Тикмән менән.**

**Тамам.**

**Инде рәхимле олуғ падишаһҡа түләй торған яһағыбыҙ — 171 һуҫар, 18 батман бал.**

**Тарих яҙылды Мәскәүҙә мең дә биш йөҙ алтмыш етенсе йылда, февралдең туғыҙынсы көнөндә. Рәхимле олуғ падишаһтың әмере берлә кинагага йангаттык, первый салдилалариус Кузмин, төзедим подъячий Иван Павлов, тарих мең дә биш йөҙ алтмыш етенселә, майҙың егерменсе көн ирди. Йасак түләй торган башкортлар: кенәз Йәнбакты Ҡодаш уғлы, Уразлы Урман уғлы, Мәхмүд Дистан уғлы, Ҡомачыҡ Йайыҡ Сыбы уғлы — юлдаштары илән Мең әйләвенең Йәнбаҡты кенәз Ҡодаш уғлының грамотасы — Грамота йулдашлары берлән.**

**Вә Аллаһу әғъләм.**

Документтан күренеүенсә, Ҡоҙаш кенәзгә ер бер нисә урындан тәғәйенләнә. Бороулы күле, Ҡондоҙло күле һәм башҡа географик исемдәр күрһәтелгән. Ауырғазы тирәһендәге ерҙәрҙә тәүҙә Ҡоҙаш үҙе, һуңыраҡ уның нәҫелдәре урынлашып, ул яҡта Ҡоҙаш түбәһе булыуы билгеле. Ә Өфө Иҙеле йылғаһы тамағынан Ҡармасан тамағына саҡлы, ике яҡ һыу буйлап урман-яландары кергән территорияла беҙҙең ата-бабаларыбыҙ, Янбаҡты кенәз вариҫтары төпләнә. Был территория Ҡармасан тамағынан үргә табан Болошлы, Оло Өйҙөрәк, Ҡорай йылғалары башланған тәңгәлгә саҡлы килеп, Болошлы йылғаһының һул яғынан Димгә ҡәҙәр төшә, унан һуң һулға боролоп, Дим буйлап Ағиҙелгә, Өршәк буйҙарын да эләктереп, Өфө Иҙеле йылғаһы тамағында тоташа. Бирелә Янбаҡты кенәз исеме географик атамаларҙа мәңгеләшеп ҡалған. Әлеге Благовар районы территорияһында башланған йылғасыҡ Ыҫлаҡ йылғаһының уң ҡушылдығы, йәнәшәлә — Шишмә районы территорияһында Янбаҡты исемен йөрөткән күл, Благовар тимер юл станцияһы менән Сафар тимер юл разъезы араһында Янбаҡты разъезы урынлашҡан. Ә Янбаҡтының нәҫел-нәсәбе Башҡорт Тирмәһе, Ыҫлаҡбаш, Һарайлы, Иҫке Усман ауылдарында йәшәй.

Ҡәнзәфәр бейҙең икенсе улы Дистанға ер Дим буйынан, Суҡраҡлы тамағынан Дим буйлап өҫкә табан тейә. Ләкин Дистан тоҡомоноң яҙмышы драматик хәлдә ҡала. Улар ата-бабаларынан килгән аҫаба ерҙәренә хоҡуҡтарын юғалталар. 1734 йылға тиклем Дистан тоҡомо үҙҙәренең ерҙәрендә тыныс хәлдә йәшәй. Аҙаҡ Ҡырҡөйлө-Мең волосы еренә, ниндәйҙер аңлашылмаған сәбәп менән, таныш булмаған сит, көньяҡ башҡорттары килеп кереләр һәм быларҙы ҡыҫырыҡлай башлайҙар. 1734 йылдың 26 июнендә үк был хаҡта уларҙың бабалары Абдулла Ҡадиров тарафынан Өфө провинциаль канцелярияһына ғариза юллана. Тейешле органдарға тикшереп асыҡларға ҡушылһа ла, ергә булған аҫабалыҡ хоҡуҡтарын ҡайтарып ала алмайҙар. Улар үҙ аҫаба ерҙәрен ташлап, меңлеләрҙең боронғо ере иҫәпләнгән Минзәлә йылғаһы буйына күсенеп китергә мәжбүр булалар. Улар Һарайлы-Мең волосы Иман ауылында 13 йыл йәшәйҙәр. Дистанлыларҙың төп өлөшөн 1747 йылдың 17 февралендә төҙөлгән килешеү буйынса Илекәй-Мең һәм Ҡырҡөйлө-Мең волосы аҫабалары ерҙәренә керетеләләр (А.З.Асфандияров. История сел и деревень Башкортостана. Книга 7, Уфа: ”Китап”, 1997. С.51—52). Ә бер нисә араны үҙ-ара килешеү буйынса Ҡоҙаш улы Янбаҡты кенәз вариҫтары үҙҙәренең еренә керетә. Йәнәшә торған ике ауыл — Һарайлы-Моталлип (Һарайлы) һәм Моталлип (Иҫке Усман) ауылдары барлыҡҡа килә. Ике ауыл да рәсми матбуғатта 1788 йылда телгә алына. Һарайлы-Моталлипҡа боронғо ата-бабалары еренән — Башҡорт Тирмәһенән бер нисә ғаилә ҡушыла, ә Янбаҡты нәҫеленән булған Моталлип халҡы был урынды 1671 йылда ер бүлешкәндән һуң ҡышлау урыны итеп үҙләштерә.

## Меңлеләрҙең оло шәжәрәһе эҙенән

Ауылыбыҙҙың шәжәрәһе булғанлығы тураһында миңә бәләкәй саҡтан уҡ күп ишетергә тура килде. Үткән быуаттың буталсыҡ утыҙынсы йылдарында ул юғалған. Ауылдың быуындан-быуынға күсеп килгән

тарихын, риүәйәттәрҙе мәзин Мөхәммәтхан Лотфрахман улы Минһажев (1907—1995), Мөдәррис Хәбибйән улы Ҡорбанғолов (1870 йылғы), Сафиәхмәт Әхмәдвәли улы Ҡолоев (Ҡорбанғолов, 1885 йылда тыуған), Рәхмәтйән Әхмәтйән улы Ҡорбанғолов (1902—1993) һәм башҡаларҙан ишетә инем. Улар үҙ сиратында Хәмзә Әфрәим улы Ҡорбанғоловтан (1840 йылғы), Ҡараяҡуп ауылынан Миңлеғәли Мөхәммәтйәр улы Йосоповтан (ул танылған Мырҙаевтар тоҡомонан) һәм башҡаларҙан ишеткәндәр. М.М.Йосопов 1920—1921 йылдарҙа волость башҡарма комитетында сәркәтип булып эшләгән. Ҡағыҙ булмағанлыҡтан, боронғо документтарҙың артҡы битенә яҙғандар. Иҫке документтар араһында 1863 йылда башҡорттар араһында ергә ыҙан үткәреү документтары һәм башҡа мөһим эстәлекле тарихи мәғлүмәттәр осраған. Уларҙың мөһимлеген аңлап, ҡағыҙҙарҙы 1940 йылға тиклем һаҡлаған. Шунан Өфө китап палатаһы директоры Әмировҡа, расписка алып, фондта һаҡлау өсөн тапшырған. Ләкин бер нисә йыл уҙып һорағас, Әмиров документтарҙы әллә Мәскәү, әллә Екатеринбург архивына ебәреүен әйткән, тик быны раҫлаусы документ күрһәтә алмаған.

М.М.Йосопов 1937 йылда мөфтөй Ғабдрахман Рәсүлов тарафынан Мәскәүгә байтаҡ ҡағыҙҙар ебәрелеүе хаҡында Рәхмәтйән Ҡорбанғоловҡа һөйләп ҡалдырған. Улар араһында Һарайлы ауылының донъяуи фәндәр буйынса тәүге уҡытыусыһы Әхмәт Ғәлиев тураһында белешмә һәм унда һаҡланған иҫке китаптар һәм тарихи ваҡиғалар яҙылған ҡағыҙҙар булған.

Шәжәрәнең яҙма нөсхәһе һаҡланмаһа ла, унда теркәлгән нәҫел-нәсәпте телдән белеүселәр күп булды. Мөхәммәтхан ағай нәҫел ағасын былай тип һанап китә ине: минең атай Лотфрахман (1883 йылда тыуған), уның атаһы Минһажетдин (1834), уның атаһы Ғималетдин (1797—1842), уның атаһы Сәйфетдин (1772), унан алда Әхмәр (1735—1813), унан алда Ҡорбанғол, унан Һөйәрғол, унан атаһы Сәлтәшхан, унан — Тәвәт, Тәкәй, Амангилде бей, Ҡолһары бей, Ҡоръямал бей, кенәз Янбаҡты, кенәз Ҡоҙаш, Ҡәзанфәр (Ҡәнзәфәр) бей — был урында туҡталып, бына ниндәй исемдәр булған әүәл замандарҙа, тип, иғтибарҙы шуға йәлеп итеп, артабан — Мең һаҙаҡлы Урҙас бей, — тип әйтер ине. Урҙас бей менән Ҡәнзәфәр араһында 10—11 быуын булғанлығы беленде (Р.Кузеев. ”Башҡорт шәжәрәләре”). Беҙ Мөхәммәтхан ағайҙарҙан Әхмәрҙән һуң айырылабыҙ. Әхмәргә тиклем беҙҙекеләр Ҡолһарин фамилияһын йөрөткәндәр, Ҡорбанғолов фамилияһын тәү башлап Әхмәр алған, унан һуң байтаҡ ара үҙҙәренең ҡартаталары исемен фамилия итеп алғандар. Был тәртиптәге нәҫел ағасы теҙмәһен һуңыраҡ Рәхмәтйән Әхмәтйән улының шәхси архивында, рус һәм ғәрәп графикаһында яҙылған нөсхәлә осраттым.

Әхмәрҙең өс ҡатынынан (халыҡ телендә дүрт ҡатыны булған тигән хәбәр ҙә бар ине) туғыҙ улы үҫкән. Шуларҙың Дауыт исемле береһе (1770—1851) ғәскәри йорт старшинаһы, 14 класлы хеҙмәткәр була. Дауыттың өлкән улы Әбүбәкер. Ул Иҫке Моталлип ауылының шәжәрәһен алып барған. Әбүбәкерҙең Динмөхәммәт исемле улы тыуған. Динмөхәммәттең Сәрүәретдин исемле улы 1926 йылда Шишмә районы Яңы Усман ауылынан Архангель районы Сәғит ауылына күсеп киткән. 1872—1874 йылдарҙа ауылдың бер төркөм типтәрҙәре һәм типтәрҙәр менән

туғанлыҡҡа кергән башҡорт ғаиләләре Дим буйынан 825 дисәтинә ер бүлеп алыуға ирешеп, үҙҙәренә мөстәҡил яңы ауыл — Яңы Моталлип — һуңыраҡ шул уҡ Яңы Усман ауылын нигеҙләйҙәр. 1958 йылдың октябрь айында 70 йәшлек Сәрүәретдиндән тыуған яҡты өйрәнеүсе Рәхмәтйән Ҡорбанғолов шәжәрә тураһында һорашып ҡараған. Әммә тегеһе актив партия хеҙмәткәренә, коммунисҡа шәжәрәнең серен асырға ҡурҡҡан, икеле-микеле яуап менән сикләнгән. Унан һуң ауылыбыҙ мәзине Лотфрахман Минһажев та утыҙынсы йылдар урталарында, ҡулға алһалар, юғалмаһын тип, бер нисә кешегә һаҡлау өсөн шәжәрә дәфтәрен тәҡдим итеп ҡараған. Алыусы булмаған, мәзиндән яҙыу алырға ҡурҡҡандар.

Рәхмәтйән Әхмәтйән улы был өлкәлә эҙләнеүҙәрен туҡтатмай. 1960 йылда Р.Ғ.Кузеев авторлығында ”Башҡорт шәжәрәләре” китабы донъя күргәндән һуң, тыйылып килгән был өлкәлә бер аҙ йәнләнеү һиҙелә. Партия органдарында яуаплы вазифалар биләү, командировкаларҙа йыш йөрөү уға ҡулай килеп торған. Рәхмәтйән Ҡорбанғоловҡа Урта Усман ауылы кешеһе Шәһийән Ризван улы Сөләймәнов Һарайлы-Моталлип ауылының шәжәрәһе Ғәндәлиф Ахмуд улы Ҡорбанғәлиевта булыуын әйтә. Рәхмәтйән Әхмәтйән улы шәжәрәне эҙләп килеп, Ғәндәлиф Ахмуд улын таба. Ә Ғәндәлиф шәжәрәне Шишмә ҡасабаһында йәшәүсе ағаһы Сабирйәнгә биргән икән.

Рәхмәтйән ағай күренекле ғалимдар Р.Ғ.Кузеевты һәм Ә.И.Харисовты ла был эшкә ылыҡтыра. Улар бергәләп Сабирйән ағайға баралар һәм шәжәрәне СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалына тапшырырға күндерәләр. Сабирйән ағай үҙенең ҡыҙы Әлфиәне шаһит итеп алып, шәжәрәнең тышлығына ғәрәп хәрефтәре менән уны бүләк итеүен теркәп, 1968 йылдың 9 сентябрендә ҡомартҡыны Р.Ғ.Кузеев, Ә.И.Харисов һәм Р.Ә.Ҡорбанғоловҡа тоттора. Шәжәрәне Р.Ғ.Кузеев ала.

Филиал Президиумы рәйесе С.Р.Рафиҡов 12 сентябрҙә үҙенең рәхмәт хатын юллай. Бына уның күсермәһе:

*Академия наук СССР*
*Башкирский филиал*
*12 сентября 1968 г.*
*№910*

*Глубокоуважаемый Сабиржан Ахмутович!*

*От имени Президиума Башкирского филиала Академии наук СССР сердечно благодарю Вас за ценный подарок, который Вы преподнесли нашему научному архиву.*

*Рукописная книга, которая содержит интересный материал по истории культуры башкирского народа, послужит прекрасным источником нынешним и будущим исследованиям.*

*Желаю Вам и Вашей супруге здоровья и долгих лет жизни.*

*Председатель Президиума*
*Башкирского филиала АН СССР,*
*академик АН КазССР*
*С.Р.Рафиков.*

Шәжәрәне төптәнерәк өйрәнергә тырышып, Мәхмүт Рәхмәтуллин менән Рәхмәтйән Ҡорбанғолов байтаҡ көс сарыф итәләр. Әммә ғәрәп һәм фарсы, иҫке төрки телдәре ҡатнашмаһында яҙылған был ҡомартҡыға тештәре үтмәй. Ярҙамға күренекле ғалимдар Закир Шакиров менән Талмас Ғариповты йәлеп итәләр. Китап 700 биттән торған, айырым биттәре йыртып алынған. Ҡалынлығы 10 сантиметр булып, ҙур форматтан торған, күн менән тышланған, ҡулдан яҙылған был китап ул осорҙағы Шәреҡ әҙәбиәте ҡанундары стилендә, төрки халыҡтарҙың бабаһы һаналған Нух пәйғәмбәрҙән башланып, унан һуңғы пәйғәмбәрҙәр, ғәрәп хәлифтәре, хандар, солтандар теҙеп яҙылған. Уларҙан һуң башҡорт бейҙәре, Ислам-Ҡыйа солтан, Ҡадер-Ҡыйа солтан, Ҡотло-Ҡыйа солтан исемдәре теҙелгән. Тарихи шәхестәр менән бер рәттән мифик геройҙарҙың да исемдәре яҙылған. Аҙағына табан төрлө ҡул менән яҙылған, төрлө характерҙағы яҙмалар теркәлә башлаған. Улар йылъяҙма характерында булып, төрлө хәл-ваҡиғаларҙы, тыуған балаларҙы, никахҡа кереүселәрҙе, мәрхүмдәрҙе, тәбиғәт хәлдәрен, бәлә-ҡазаларҙы теркәй. Шулай уҡ Болғар тарихына ҡағылған мәғлүмәттәр, поэмалар, мөнәжәтбәйеттәр, дини хикәйәттәр айырым биттәрҙә урын алған.

Шәжәрәлә шулай уҡ ун бер башҡорт ырыуының батша Алексей Михайловичҡа үҙ-ара ер бүлешеүҙе юллап яҙған текст, ер бүлешеүҙе раҫлаған грамота ла булған, әммә ул биттәр йыртып алынған.

Ғалимдар шәжәрәне аҙағына тиклем өйрәнеп бөтә алмағандар. Шәжәрә 1861—1864 йылдар араһында Һарайлы-Моталлип ауылы муллаһы Ниғмәтйән Ҡорбанғәлиев тарафынан күсерелгәнлеге һәм ҡайһы бер ерле факттар өҫтәп яҙылғанлығы билдәләнә. Ниғмәтйәндең ейәне Ғәндәлиф Ахмуд улы шәжәрәгә үҙенең нәҫел ағасын яҙып ҡуя. Үҙенең нәҫелнәсәбе менән ҡыҙыҡһыныусы Һарайлы ауылы халҡы, уны күсереп алып, үҙҙәренең нәҫел ағасын дауам итәләр.

Нәҫел ағасының схемаһы Челбак хандан башлана. Мең һаҙаҡлы Урҙас бей Челбак хандың улы тип күрһәтелә. Унан һуң Ҡәнзәфәр бей һәм уның дүрт улы — шул иҫәптән Дистан, уның улы Мәхмүт (ул уҡ Ахмуд), Шәихсан — Шәихдербиш, Янбарыс, Яңырыс, Ҡотош, Юныс, Туҡтағол, Туҡтарғәле, Ҡорбанғәли, Ниғмәтйән, Ахмуд, унан һуң 1890 йылда тыуған Сабирйән һәм 1893 йылда тыуған Ахмуд улы Ғәндәлиф үҙе менән тамамлай. Шәжәрәнең төп өлөшө Урҙас бейгә мөнәсәбәтле мең ырыуы шәжәрәләренең башҡа варианттары менән башлыса тап килә.

Ғалимдар бик дәртләнеп шәжәрә өҫтөндә эшләй башлай. Әммә оҙаҡламай Закир Шакиров мәрхүм булғас, был оло эш туҡталып ҡала. Шәжәрәгә ҡабат әйләнеп ҡайтырға ғалимдарҙың ҡулы етмәй. Төшөнөп бөтмәгән урындары төптән өйрәнелмәй. Академия архивында күңелһеҙ хәлдәр булып ала, архивты һыу баҫа, фондтар әрәм-шәрәм ителә. Коллективта быуындар алмашына. Ана шул буталсыҡ осорҙа Ғәндәлифтең 1935 йылда тыуған улы Фәнүз, үҙ алдына ғәрәп графикаһын үҙләштергән пенсионер, шәжәрәне академиянан алып китергә мәжбүр була. Ул алтмышлап бит материалды бөгөнгө телгә ауҙара. Был ифрат ҙур шәжәрәлә йәнә бер мөһим мәсьәлә асыҡланырға тора: текста меңләр шәжәрәһенең беренсе киҫәге авторының исеме күренә һәм уның нисәнсе йылда яҙылғанлығы әйтелә: һижри менән 958 (1551) йыл, күсереп яҙыусы Хисамитдин бине Шәрәфетдин Мөслими хеҙмәттәрен файҙалан-

ғанын әйтә, Тәфтизән һәм башҡа боронғо әҙиптәрҙең исем-шәрифтәре күрһәтелә. Был боронғо китапты заманса телгә ауҙарып, нәшер итеү бөгөн бик зарур.

Һарайлы ауылында шәжәрәнең йәнә бер варианты барлығы беленә. Ул оло шәжәрәнән күсерелгән булырға тейеш. Уны Биккинин фамилияһын йөрөтөүсе Биккенә тармағынан айырылғандар башҡарған. Өҫтәге ер бүлешеү грамотаһы тексы шунан килтерелде. Был вариант шаҡтай ҡыҫҡартылған, 70-ләп кенә биттән тора. Ҡайһы бер мөһим булмаған айырымлыҡтарға ҡарамаҫтан, эстәлегендә, шәжәрә ағасында айырма юҡ дәрәжәһендә.

Шулай уҡ был вариантта бер мөһим өҫтәмә бар. Ер бүлешеү грамотаһының ахырында: ”Вә йәнә мин Дистан алдым: Ҡармасан буйын, урман-яланы менән, ике яҡ һыу ағышы менән һәм Ҡазан Тау, Тикмән менән. Тамам”, — тиелә. Дистанға ер Дим буйынан бирелгәнлеге өҫтә яҙылды. Башҡа варианттарҙа уға Ҡармасан буйынан ер бирелеүе хаҡында хәбәр-мәғлүмәт юҡ. Дистан тоҡомоноң Дим буйындағы аҫабалыҡ еренән мәхрүм булыуҙары хаҡында ла өҫтә әйтелде. Шәжәрәнең был вариантын күсереүселәр, үҙҙәре шул осорҙа йәшәгән төбәктәрен Дистанға бирелгәнгә һанап, өҫтәп ҡуйыуҙары ихтимал. Был шәжәрәне күсереүсе Шәйхетдин Фәрхетдин улы Биккинин (1854—1941) Дистан ырыуының 7179 (1671—1672) йылда Дим буйынан аҫабалыҡҡа ер алып, һуңынан ата-бабаларының ерҙән мәхрүм ҡалыуҙары һәм был яҡҡа яңынан 1747 йылдан һуң кире ҡайтыу тарихын белмәгән, тип аңларға кәрәк. Ғәмәлдә иһә һуңыраҡ Һарайлы-Моталлип, Өйҙөрәкбаш, Ҡаҙанғол ауылдары тирәһендәге ерҙәр ”Дистан түбәһе” тип аталып йөрөтөлгән осор ҙа булған.

Ауыл аҡһаҡалдары һөйләп ҡалдырғанса, был ике ара — Ҡорбанғәлиевтар һәм Биккининдар, йәмәғәт урындарында осрашҡанда, табынға йыйылғанда йыш ҡына үҙ-ара бәхәсләшә торған булғандар. Ҡорбанғәлиевтар тоҡомо хатта, һеҙҙең меңлеләргә ҡатнашығыҙ юҡ, ҡартатайығыҙ Шәйхетдин, беҙҙең күренекле Дистан тамырына килеп ҡушылыу ниәте менән, яйлаштырып, исемдәрҙе тура килтереп кенә яҙған, тиеүгә ҡәҙәр барып еткәндәр. Әммә ундай ғәйеп ташланған булһа, юҡҡа ғына. Мең ырыуҙары берекмәһендә 12 айырым ырыу барлығы билдәле. Дистан тамырында 27 ара һаналып, шулар араһында Биккенә беренсе тәртиптә ҡарала, Биккенәнән тыш, Һарайлы ауылынан Ишмөхәммәт, Ҡотош, Янғарыс, Аҡкай, Балтас аралары һанап үтелә. Шәжәрә күсермәһе Шәйхетдиндең улы Ахкаметдиндә (1895—1993) һаҡланған, унын малайҙары булмаған, шәжәрә ҡыҙы Бәйзаның ейәне Рифғәт Сөләймәнов ҡулына күсә. Меңлеләрҙең тарихын боҙоп, уларҙы татар тип күрһәтеп йөрөүсе кешеләр ярҙамы менән шәжәрә Ҡазан ғалимы Марсель Әхмәтйәновҡа эләгә.

Был өлкәлә ғалимдар араһында элек тә яңылышыу, буталсыҡ, аңлашылмаусылыҡтар булып торған. Был мәсьәләлә Герберштейн менән Миллер ҙа башҡортто татарҙан айырмаған. Татар этнонимы буйынса тарихҡа буталсыкты тәүҙә ҡытайҙар керетә. XII быуатҡа ҡәҙәр улар монголдарҙы татарҙарҙың бер өлөшө тип һанайҙар, ә XIII быуаттан татарҙарҙы монголдарҙың бер өлөшө итеп ҡарайҙар. XII быуатта, далала ваҡытлыса татарҙар өҫтөнлөк алған осорҙа Бөйөк Ҡытай стенаһы-

нан төньяҡтараҡ йәшәгән барлыҡ халыҡты ”татар” термины менән атап йөрөтәләр. Һуңыраҡ был термин рустарға ла күсә, төрки телле бөтөн халыҡ улар өсөн ”татар” була.

Әммә тора-бара фәндә был мәсьәләләргә асыҡлыҡ керетелә. Халыҡҡа дөрөҫлөк еткерелә. Был йәһәттән күренекле әҙип Ризаитдин Фәхретдиндең ”Болғар вә Ҡазан төрөктәре” хеҙмәтендә әйтелгән фекерҙәре бик фәһемле. Ул монгол телле ысын татар һәм монголдың үҙенә эйәреп төркиҙәргә ҡушамат булып тағылған ”татар” терминының ҡайҙан килгәнлеген аңлатып, былай яҙа: ”Болғар ҡәүеме өҫтөнә һөжүм иткән монгол хандары ҡул аҫтында ”татар” исемендә бер төркөм ғәскәр булһа ла, монголдар үҙҙәрен ”татар” һанамайҙар һәм ”татар” исемен күтәрергә риза булмайҙар... ”Татар” һүҙе Сыңғыҙ ғәскәрендә алдан йөрөүсе бер төркөм монгол ғәскәренә махсус бирелгән исем булып, этнографик (нәҫел-нәсәп һәм ҡәбилә-ырыуға әйтелә торған) исем түгел, ул рустарҙың ”казачий”ҙары урынында, Сыңғыҙҙың ”татар” исемле ғәскәри бүлегелер... Шуға күрә был мәмләкәттә Нух пәйғәмбәрҙең эйәрсендәре замандарынан бирле йәшәгән ҡәүемде ”татар” тип йөрөтөү сирмештәрҙе көтөүсе һәм сыуаштарҙы йөн тетеүсе тип йөрөтөү кеүек бер эштер. Монголстанда, ихтимал, ”татар” исемендә берәр нәҫел һәм ҡәбилә лә булғандыр. Ләкин Монголстан ҡайҙа ла, Болғар ҡайҙа?.. Һәр хәлдә, беҙ инде, яңылыш булһа ла, ”татар” һүҙен ҡулланырға мәжбүрбеҙ”.

Ул мәсьәләлә ғалимдар араһында аңлашылмаусанлыҡ юҡ. Был фекер менән тарихсылар килешә. Ниңә һуң Ҡазан ғалимдарының ҡайһы берҙәре монголдар төҙөгән Алтын Урҙа дәүләтен ”татарҙар төҙөгән дәүләт” тип яҙалар? ”Татар” термины монголдарға ғына эйәреп килгәнлеген белә тороп, ”Урал-Иҙел төбәгендә татарҙар борондан уҡ билгеле”, тип яҙырға бер ниндәй нигеҙ юҡ.

Был һорауҙарға Р.Фәхретдинов былай тип яуаплай:

”Рус монахтары һәм монастырь хеҙмәтселәре монгол хөкүмәтенең алдан килеүсе ғәскәрен ”татар” тип яҙҙылар. Рус тарихсыларының сығанаҡтары юҡ, быларҙың күбеһе монахтар тарафынан яҙылған нәмәләр. 19-сы милади быуатта беҙҙең ғилем һөйөүселәребеҙ Көнсығышты өйрәнеүсе ғалимдарға ҡатнашып йөрөй һәм рус әҫәрҙәрен уҡый башланылар. Рус тарихында күренгеләгән ”татар” исемен тикшереүһеҙ һәм тәнҡитһеҙ алып, яманат сығарҙылар. Юғарылағы һорауҙың ҡыҫҡаса яуабы шул”.

Шулай итеп, ”татар” һүҙе — милләт исеме, этноним түгел, ә монгол ғәскәрендә алдан йөрөүсе авангард — алғәскәр, дошман көсөн билдәләп, һынап, йәғни ”татып” ҡараусы — ”татар” ғәскәри төркөмө исеме генә, йәғни әүәл ”татар” тигән халыҡ бөтөнләй булмай.

XIX быуатҡа тиклем тарих яҙған ғалимдар төрки халыҡтарға ҡарата ”татар” һүҙен ҡулланмайҙар, ә төркиҙәрҙе үҙҙәренең этник атамалары менән ”башҡорт”, ”манғыт”, ”нуғай”, ”уйғыр”, ә ҡазанлыларҙы, башҡаларҙан айырып, ”Ҡазан төркиҙәре” тип яҙалар.

М.Әхмәтйәнов меңләләр шәжәрәһенең телен ”иҫке татар теле” тип күрһәтә. Әммә шәжәрәләр ул осорҙағы төркиҙәрҙең уртаҡ яҙма телендә башҡарылған, ул саҡта әле татарҙа ла, башҡортта ла әҙәби яҙма тел булмай.

Йәнә М.Әхмәтйәнов башҡорттарҙы һәм бөгөнгө дәүерҙә төрки телле татарҙарҙың төп компонентын тәшкил иткән мишәрҙәрҙе ни бары ”ғәскәри ҡатлам” (войсковое сословие) тип яҙа. Бөгөн ”татар” ҡушаматы менән атап йөрөтөлгән Ҡазан төркиҙәренең, Ҡасим һәм Төмән (Темников) мишәрҙәренең үҙҙәренең мәшһүр тарихтары, ғөрөф-ғәҙәттәре бар. Айырым Ҡазан ғалимдары уларҙы болғар сығышлы яһарға ынтыла. Башҡорттар хаҡындағы беренсе мәғлүмәттәр иһә милади йыл иҫәбе менән Марин де Тур әҫәрендә — беренсе быуатта, Птолемей әҫәрендә икенсе быуатта уҡ телгә алына. Бындай миҫалдар бихисап. Ә.-З.Вәлиди ”Башҡорттарҙың тарихы” хеҙмәтендә былай тип яҙа: ”Төрөк риүәйәттәренең иң боронғоһо булған Уғыҙ дастанында башҡорттар Иҙел буйында һәм уға яҡын болғарҙар менән сиктәш таулы бер өлкәлә йәшәгән ҡеүәтле һәм хәйләкәр (көслө һәм ғәййәр) халыҡ тип танылған һәм үҙенең ғорурлығы, ҡыйыулығы арҡаһында һис бер жиһангиргә баш эймәгән ҡәүем сифатында иҫкә алынған. Улар йәшәгән таулы өлкә (Урал тауҙары) ”Башҡорт тауҙары” (Куһһан Башкурт) тип аталған. Был дастанда барлыҡ төрөк ҡәбиләләре иҫкә алынған хәлдә лә, ”болғар” ҡәбиләһе иҫкә алынмай. Ҡеүәтле ҡәбилә булараҡ, тик башҡорттар хаҡында ғына һүҙ бара”. Иҙел-Урал-Алтай регионында Болғар һәм Сувар әлегә ниндәйҙер сәйәси берләшмә сифатында иҫкә алынмаған замандарҙа уҡ башҡорттарҙың иҫкә алыныуы бик әһәмиәтле. Боронғо башҡорттар хаҡындағы иң тәүге мәғлүмәттәрҙең береһе Ҡытай сығанаҡтарында күренә, Орхон яҙмаларында иҫкә алына. Башҡорттар Гөктөрөктәр заманында Төлес составына кергән төрки ырыу булып, һун ҡәүеменән иҫәпләнгәне әйтелә.

Ғәрәптәр башҡорттарҙы хәҙерге Иҙел-Урал өлкәләрендә йәшәүсе тип белә. Тарихсы Масуди бәжәнәктәр һәм тағы өс ҡәбилә менән берлектә Бажгурд исемле бер ҡәбиләнең, Арал күле янында Уғыҙ, Ҡарлуҡ һәм Кимәктәр менән һуғышып еңелгәндән һуң, Төньяҡ Кавказға, Хазар ҡағанатына сигенеүҙәре хаҡында яҙа. Был ваҡиғаның 840 йылдарҙа булыуы билдәле. Мосолман милләттәр ошо ҡәүемде Башжирт, һәм Башгурд исемдәре аҫтында таный” (Ә.-З.Вәлиди. Башҡорттарҙың тарихы).

Күренекле ғәрәп сәйәхәтсеһе Ибн-Фаҙлан кәтиб булып хеҙмәт иткән ғәрәп илселеге 922 йылдың яҙында Болғарға килгәндә, Яйыҡ йылғаһын сыҡҡас, башҡорттар менән генә осрашыуы хаҡында яҙа, ә ”татар” тигән халыҡ иҫкә алынмай. Был боронғо башҡорт ҡәүемдәре, Ҡазан ғалимдары атап күрһәтеүенсә, ”татар сығышлы башҡорт хәрби сословие”һына ҡайһы быуатта әйләнделәр икән?

Ниһайәт, төплө белемле Европа тарихсылары, сәйәхәтселәр, рус ғалимдары, яҙыусылары, хакимдары, шул иҫәптән Иван IV, башҡа батшалар башҡортто башҡорт тип таныйҙар. Д.Н.Соколов, М.В.Лоссиевский, П.С.Назаров, П.И.Рычков, И.К.Кирилов, В.Н.Татищев, В.И.Даль, Д.С.Волков, А.С.Пушкин, С.Т.Аксаков һ.б. бик күптәр был мәсьәләлә ике төрлө фекер әйтмәй. М.Әхмәтйәнов: ”Был дәүерҙә (1567 й.) тарихта Башҡортостан тигән административ-географик термин да, атама ла булмаған. Әлеге терминды, тарихи сығанаҡтарға хыянат итеп, тарихсы Зәки Вәлиди үҙенең ”Башҡорттарҙың тарихы” исемле китабында бик керетергә тырышһа ла, факттың абсурд икәнлеге күренеп тора”, — тип яҙа.

Әммә терминдар, атамалар төрлөсә яҙылһа ла, уларҙың эстәлеге, мәғәнәһе бер үк — ”Башҡорт иле” термины ”Чувашия”, ”Удмуртия”, ”Татарстан” тигән атамаларҙан бик күп быуаттар алда барлыҡҡа килгән. Был хаҡта профессор Ә.З.Әсфәндиәров ”Башкирия после вхождения в состав России” тигән хеҙмәтендә бик ентекләп яҙа (Уфа: ”Китап”, 2006). Борон башҡорттар йәшәгән бөтә территория ”Башҡорт иле” тип аталып йөрөтөлгән. Дөрөҫ, авторҙарҙың ниндәй телдә яҙыуҙарын ҡарап, ”башҡорт” атамаһы төрлө варианттарҙа бирелгән. Бер нисә генә миҫал килтерәйек. Башҡорттарҙың ҡайҙа, ниндәй тауҙар һәм йылғалар тирәһендә йәшәгәндәрен күрһәткән тәүге хәбәрҙәр Фазлаллах Рәшид-әд-дин хеҙмәттәрендә VIII быуатҡа ҡарай (”Огузнаме”). Ғәрәп һәм фарсы тарихсылары, сәйәхәтселәре яҙмаларында башҡорттар тураһында мәғлүмәт IX—X быуат хеҙмәттәрендә үк осрай (Сәлләм Тәржемән, Әхмәт Ибн-Фаҙлан, Әл-Бәлхи, Әл-Масуди һ.б.). Мәҫәлән, М.В.Лоссиевский ғәрәп һәм фарсы әҙәбиәте сығанаҡтарына таянып, Башҡортостан тип аталған ерҙә, шулай уҡ Каспий һәм Ҡара диңгеҙҙән көньяҡтараҡта башҡорт, болғар, нуғай, хазар, печенег исемле ҡәбиләләр IX быуатта уҡ йәшәгәндәр, тип яҙа. Бер өлөшө Һун яуы заманында улар менән бергә килгән һәм шуларҙың вариҫтары булып торалар. Багдад хәлифе Йәғфәр әл-Мәкътәдирҙең Иҙел Болғарстаны хакимы Шилке уғлы Алмыш — Әлтабар хозурына ебәргән илселегенең сәркәтибе Ибн-Фаҙлан бына ниҙәр хәбәр итә: ”Бәжәнәктәрҙә беҙ бер генә көн ҡундыҡ. Унан һуң ҡабат юлға сыҡтыҡ һәм Яйыҡ һыуы буйында туҡталыш яһаныҡ... Байтаҡ көндәр үткәс, беҙгә башта Жаха йылғаһын, унан һуң Ирхиз, Багач, Сәмур, Кинал, Сух, унан Көнжеле тигән һыуҙарҙы кисеп сығырға тура килде. Был йылғаларҙы үткәндән һуң беҙ төрки ҡәүемдәренә кергән башҡорттар иленә килеп еттек... Күпмелер ваҡыттан һуң беҙ башҡорттар иленән китеп барҙыҡ һәм Шарамсан һыуын кистек”.

Был китапта Багдад илселегенең юлын күрһәткән картала саманидтар, сәлжүктәр, уғыҙҙар, ҡыпсаҡтар, кимактар, бортастар, башҡорттар, болғарҙар йәшәгәнлеге күрһәтелгән. Ләкин татарҙар хаҡында текста ла, картала ла бер мәғлүмәт тә бирелмәй. Хәйер, уның булыуы ла мөмкин түгел. ”Татар” термины, атамаһы Урал-Иҙел төбәгенә монголдарға эйәреп XIII быуатта ғына килә.

М.Әхмәтйәнов монголдарҙы татар тип атай. Башҡа Ҡазан ғалимдары ла монгол ғәскәрҙәренең алдынан татарҙар килгән, тип яҙалар. Әммә уларҙың Иҙел буйына килеп етеүҙәре шикле. Иң мөһиме — беҙҙең меңлеләр 700—750 йыл элек үҙҙәренең башҡортлоғон әйтеп, шәжәрәләргә яҙып килгәндәр. Шәжәрәлә үҙҙәре, беҙ башҡортбоҙ, яһаҡ түләүсе башҡорттарбыҙ, тип яҙғандар. М.Әхмәтйәнов беҙҙең Һарайлы ауылында һаҡланған, ҡартаталарыбыҙ яҙып ҡалдырған шәжәрәне тикшереп, шуға барып етә, минең 17 быуын бабайым Ҡәнзәфәр бейҙең улы Байбаҡтыны, бейҙең ейәне Янбаҡты кенәзде, шуның менән барлыҡ меңлеләрҙе хәҙерге Татарстандың Әтнә төбәгенә илтеп бәйләй, әммә ул төбәктең дә боронғо башҡорт ере булыуын танымай. Профессор М.Әхмәтйәнов меңлеләрҙе татар тип күрһәтеп: ”Урал-Иҙел төбәгендә татар ҡәбиләләре электән үк йәшәп килгән, беҙ бында килмешәктәр түгел”, — тип йомғаҡлай.

Башҡорт Тирмәһе ауылына ғалимдар 650—700, ә Ҡараяҡуп ауылына хатта 900 йыл (йәш) ҡуялар. Башҡа риүәйәттәрҙә лә ошо уҡ фекерҙе дәлилләрлек мәғлүмәттәр килтерелә. Беҙҙең Иҫке Усман (Моталлип) һәм Һарайлы (Һарайлы-Моталлип) ауылдары халҡы Урҙас һәм Ҡәнзәфәр бейҙәрҙән башлап үҙҙәренең нәҫел ағастарын төҙөп, уларҙы һаҡлайҙар, донъяға яңы килгәндәрҙе өҫтәп баралар. 2002 йылда ”Ғилем” нәшриәтендә ырыуыбыҙ тарихы тураһында ”Быуындарға йәдкәр” китабы баҫылды. Унда ҡушымта итеп 37 таблица бирелде, шуларҙың 34-ендә Ҡәнзәфәр бейҙең Ҡоҙаш менән Дистандан таралған вариҫтары бәйән ителә. Таблицаларға индерелгән аралар йән иҫәбе алыу, ҡәбер таштары текстары менән сағыштырып ҡарап, етешһеҙлектәрҙе төҙәтеп бирелде.

Иҫке Усман ауылынан Ҡоҙаш кенәздән таралған тоҡом Булатов, Ҡолоев, Ҡорбанғолов, Мәмәлимов, Мәкәримов, Насиров, Нуретдинов, Нурисламов, Минһазов, Садиҡов, Хөсәйенов, Ҡасимов фамилияларын йөрөтә. Ә Һарайлы ауылынан Дистандан таралған тоҡом Әбүзәров, Биккинин, Бәширов, Ғәлиев, Ишмөхәммәтов, Таһиров, Муллағолов, Яҡшығолов, Ҡорбанғәлиев, Латипов, Хисамитдинов, Хөснөтдинов, Байназаровтар. Болошлы урта мәктәбе музейында һәр араның нәҫел ағасы бар. Музейҙа мишәрҙәрҙең, типтәрҙәрҙең нәҫел ағасы схемалары ла күренә башланы. Күптән түгел ауылдың мәзине Венер Маннанов Ғилман Ғизетдин улы (1914—1982) һәм Ғәлимйән Рәхимйән улы (1902—1983) Маннановтар тарафынан яҙып ҡалдырылған шәжәрәне яңыртып тапшырҙы.

Һарайлы ауылында табылған шәжәрә теҙмәһендә Тирмәхан яҙылған. ”Тирмәхан Иҙел буйында хасил булды”, — тиелгән. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ һөйләп ҡалдырған ”Сәлтәшхан тураһында легенда”ла Тирмәхан исеме телгә алына.

## Сәлтәшхан тураһында легенда

Әлеге Өфө урынында нығытмалы ҡәлғә булып, уға ”Имән ҡала” тиерҙәр ине. Ҡолһар бейҙең дүрт улы булған: Рөстәмхан, Илдархан, Тәңгәүер һәм Тирмәхан. Улар үҙҙәренең йәйләүҙәрендә йөрөп көн иткәндәр. Рөстәмхан хәҙерге Йоматау тирәһендә йөрөгән, уның ҡәбер ташы хәҙерге Емелька ауылы зыяратында булған. Аҙаҡ бер урыҫ байы ҡәбер ташын үҙенең өйөнөң нигеҙенә файҙаланған, тип һөйләйҙәр. Мөҙәрис менән Мамалим (1808 йылғы) 1884—1885 йылдар тирәһендә ташты эҙләп йөрөгәндәр, әммә һуң булған, тапмағандар.

Илдархан Өфө аръяғында, Ҡаҙаяҡ төбәгендә йәшәгән. Хәҙер унда Ҡаҙаяҡ тимер юл разъезы. Тәңгәүер тирмәһен Ҡаратун (Ҡарадун, йәғни Ҡарауыл) ҡалҡыулығында (әлеге Чесноковка янында) ҡора торған булған. Уның ғүмере фажиғәле тамамланған, баш күтәреүҙәрҙә ҡатнашҡанда батша ғәскәрҙәре тарафынан үлтерелгән. Тирмәхан Тирмә ауылы тирәһендә (Башҡорт тирмәһе) йәшәгән. Тирмәхан биләмәләре төньяҡта Ағиҙел буйлап, көнбайышта Ыҡ буйҙарына еткән, ә көнсығыштан Дим буйы уның сиктәрен билдәләгән. Тирмәхандың Сәлтәшхан исемле баһадир улы булған. Тирә-яҡта уҙғарылған йыйындарҙа көрәштә еңеп сығыусы батыр икән. Уның дүрт ҡатыны

булып, улар бер ҙә һыйышып йәшәмәгән. Ул дәүерҙә башҡорттар менән ҡырғыҙҙар араһында һуғыш сыҡҡан. Йәш ҡатыны Сәлтәшханды дошмандарына тотторған һәм ҡырғыҙҙар унының башын сабып өҙгәндәр. Унының кәүҙәһе ташланған соҡорҙо Урта Усман ауылы әле лә "Сәлтәш соҡоро" тип йөрөтә. Тағы Сәлтәш исемле сейәле тау һәм унының исемен йөрөткән көй ҙә бар. Урта Усман ауылынан Динислам Ғәбделхалиҡ улы Ҡорбанғолов (1909 йылғы) Сәлтәш тураһындағы бер риүәйәтте икенсе төрлөрәк һөйләй. Нигеҙҙә шул уҡ ер өсөн көрәш һәм йәш ҡатынының хыянат итеүе ята. Сәлтәште ул легенда буйынса ҡырғыҙҙар түгел, ә көньяҡ башҡорттары үлтереп киткәндәр, имеш. Бик ҡоро, ямғырһыҙ килгән йылды йәйләү менән Дим буйына үткәрмәгән өсөн. Был хәл, күрәһең, меңлеләр менән ҡыпсаҡтар араһындағы һуғыштар мәлендә булғандыр.

Мишәрҙәр был төбәккә элекке Ҡасим ханлығы яҡтарынан, Ока, Мокша, Цна йылғалары буйҙарынан 1720—1730 йылдарҙа күсенеп килгәндәр. Халыҡ йыраҡ бабаларының ҡайҙан күскәнлектәрен һәм бөгөнгө Үрге һәм Түбәнге Тирмә ауылдарына тәүге нигеҙҙе мишәр ҡартаталары һалғанлығын белә. Ер уларға 1742 йылда болала ҡатнашҡан субимең башҡорттарынан, Өфө суд палатаһы һәм Сенат ҡарары буйынса тартып алып бирелгән. Әммә, шуға ҡарамаҫтан, меңлеләр мишәрҙәр менән һәр саҡ үҙ-ара бик яҡшы мөнәсәбәттә йәшәй. Түбәнге Тирмә ауылы тарихын өйрәнеүсе һәм үҙҙәренең нәҫел ағасы сылбырын төҙөүсе Ф.З.Мансуров "Ауыл халҡы яңы йорттар һалып керә... Ул ваҡытта урман бик шәп булған. Яҡын-тирә урмандарҙа бура бурар өсөн ағас күп була", — тип яҙа 1997 йылда Өфөлә баҫылған брошюраһында. Ысынлап та, тәүҙә был ауылдарға беренсе нигеҙ һалыусыларҙың исемен ҡушҡандар. Әйтәйек, Түбәнге Тирмә ауылы Ильяс, Туҡран, Сәйетйәғәфәр (аҙаҡ ҡыҫҡартылып Сәфәр) исемдәрендә йөрөгән. Ф.З.Мансуров "Ильяс ауылына нигеҙҙе Мансуров Ильяс, Сәфәр ауылына Кирәев Сәйетйәғәфәр һалған" — тип яҙа. Һуңыраҡ, ауылдар берләшеп, бер генә атама ҡала. Етенсе ревизия материалдарында (1816 йыл) ғәскәри йорт старшинаһы Ильяс Асанов, поход старшинаһы Сәйетйәғәфәр Әхмәтов исемдәре бар.

Мишәрҙәр башҡорттар йәшәгән бөтә ерҙе — йәйләүҙе лә, ҡышлауҙы ла, ауылды ла тирмә тип атағандар. Күршеләр үҙ-ара аралашып йәшәгәндәр. Берәр төрлө йомош төшөп, башҡорттар янына йүнәлгәндә: "Тирмәгә барабыҙ", "Тирмәлә булдым", — тип һөйләшкәндәр. Тәүге ревизия материалдарында Башҡорт Тирмәһе лә Тирмә атамаһы менән генә йөрөтөлгән. Һуңыраҡ, Ыҫлаҡ йылғаһының үрге өлөшөндә урынлашҡан ауылды — Үрге Тирмә, башҡорт ауылын Башҡорт Тирмәһе тигәндәр. Шулай итеп, был осраҡта "тирмә" һүҙе "ауыл" тигәнде аңлата. Ыҫлаҡ йылғаһы буйына бер-береһенә яҡын арала (5—6 км) теҙелеп ултырған ауылдарға бер үк кеше нигеҙ һалған тип әйтеү дөрөҫ түгел.

Меңлеләрҙең оло шәжәрәһен башҡа варианттары менән сағыштырып ҡарағанда, Тирмәхандың ҡушаматы булыуы ла ихтимал. Сөнки бында бер аҙ буталыш бар. Һарайлы шәжәрәһе Дистан тоҡомон һүрәтләй. Сәлтәшхан — Ҡоҙаш тоҡомонан. Легендаға ярашлы, Тирмәхан — Ҡолһар бейҙең улы, Сәлтәшхандың атаһы. Һарайлы шәжәрәһендә Тирмәхан хәҙерге Өфө ҡалаһы ерендә имән нығытма төҙөгән солтан Баба Төкләҫ

улы тип күрһәтелә. Баба Төкләҫтең Ағиҙелдең текә ярында ултырған нығытмалы ҡәлғәһе барлыҡ меңлеләрҙең үҙәк төйәге иҫәпләнә. Әгәр һуғыш сығып, көньяҡ далаларҙан дошман яҡынлашһа, меңләләр Ағиҙелде аша сығып, шул нығытмала туплана. Ҡәлғәнән ер аҫтына юл китеп, ул йылғаға хәтлем барып сыға.

Был тирәләге мишәр ауылдарының тарихтары, сығыштары оҡшаш. 1834 йылда (8-се ревизия) уҙғарылған ревизия материалдарына нигеҙләнеп, 1841 йылда төҙөлгән ведомоста Үрге Тирмә, Йәрми, Яңауыл ауылдарында бөтәһе 819 ир-ат, 817 ҡатын-ҡыҙ йәшәгәнлеге, уларҙың суби-мең башҡорттарынан болаларҙа әүҙем ҡатнашҡандары өсөн тартып алынған ерҙәрҙә урынлашыуы теркәлгән. Генераль ыҙан һыҙыу ваҡытында ер был ауылдарға ҡалдырыла.

Етенсе ревизия материалдарынан (1816 йыл) күренеүенсә, был осорҙа башҡорт ауылына мишәрҙәр, мишәр ауылдарына башҡорттар күсеп ултыра башлаған. Ауылдарҙың исемдәре лә үҙгәрә. Башҡорт ауылын Башҡорт Тирмәһе тип, Ыҫлаҡ йылғаһының үрге яғында урынлашҡан мишәр ауылын Үрге Тирмә тип, Ильяс, Сәфәр ауылдары бергә ҡушылғас, түбәнерәк ултырған ауылды Түбәнге Тирмә тип атағандар. Яңы атамалар ревизия документтарына ла эләгә.

1816 йылда Башҡорт Тирмәһе ауылы 8-се башҡорт ғәскәри кантонына ҡараған, ә мишәр ауылдары 3-сө мишәр кантоны составында була. Башҡорт Тирмәһендә 157 йән булып, шуларҙың 85-е ир-ат, 82-һе ҡатын-ҡыҙ. Был йылда ауылда тәү башлап ике мишәр ғаиләһе иҫәпкә алынған. Башҡорт Тирмәһе, Моталлип, Һарайлы-Моталлип, Үрге, Урта һәм Түбән Хәжәт ауылдары ғәскәри старшина Дауыт Ҡорбанғолов командаһында була һәм 8-се кантонға инә. Үрге Хәжәт халыҡ телендә Төрөкмән тип йөрөтөлә.

8 ревизия (1834 йыл) материалдары Башҡорт Тирмәһе ауылында халыҡтың артҡанлығын күрһәтә. Ауылда халыҡ һаны 273-кә етә, шул иҫәптән 126 ир-ат, 147 йән ҡатын-ҡыҙ. Уларҙан 98 кеше — аҫабалар, 228 кеше (был осраҡта иҫәп ревизия үткән ирҙәр һанына ҡарап алынған, ә ревизия процедураһы халыҡ иҫәбен алыу менән генә сикләнмәйенсә, ғәскәри башҡорттарҙың аҫабалыҡ, типтәр һәм мишәрҙәрҙең припущенник статустарына ла төплө ревизия үткәреүҙе үҙ эсенә ала) припущенниктар хоҡуғында була. Тимәк, башҡорттар ҙа, мишәрҙәр ҙә артҡан.

Халыҡ һаны йылдан-йыл арта. 1850 йылда (9-сы ревизия) 159 ир-ат, 136 ҡатын-ҡыҙ теркәлгән, шул иҫәптән 2 чиновник күрһәтелгән. 1870 йылда ауыл шаҡтай ҙурайған, мәсеттәр ҙә булған. Ихаталар һаны 60-ҡа еткән, 190 йән ир-ат, 182 ҡатын-ҡыҙ, шул иҫәптән башҡорттарҙан ир-ат — 188, ҡатын-ҡыҙ — 181, ауылға бер ғаилә типтәрҙәр (3 йән) килгән. XIX быуат ахырында, XX быуатта ауыл үҫеүен дауам итә. Мишәр ауылдары менән дә шул уҡ хәл. Милләт яғынан ауылдар ҡатнашҡа әйләнә. Әйтәйек, 1816 йылда Түбәнге Тирмә ауылында 31 ғаиләлә 196 йән теркәлгән, шул иҫәптән ир-ат — 109, ҡатын-ҡыҙ — 87 йән. 1850 йылда ауылда 17 йән (ир-ат — 7, ҡатын-ҡыҙ — 10) 3 ғаилә башҡорттар теркәлгән. Ревизиянан уҙған ирҙәр һаны — 169 йән.

Һүҙҙе тамамлап, шуны әйтергә мөмкин. Меңлеләрҙең оло шәжәрәһен яңынан ныҡлап тикшереп, бөгөнгө әҙәби телгә ауҙарып, тулы күләмдә нәшер итеү зарур. Башҡорт тарихының ысын көҙгөһө ул.

# Ҡәнзәфәр бейҙең Дистан улы буйынса шәжәрәһе

Канзафар-бий (тархан)

| Кужабакты | Байбакты | Дистан | Кодаш |
|---|---|---|---|

| | | |
|---|---|---|
| 3. | Махмуд | |
| 4. | Шеихсан | Балтач |
| 5. | Шеихдербиш | Габбас |
| 6. | Янбарис | Басари |
| 7. | Янрос | Бачурек |
| 8 | Котош | Акмурза |
| 9. | Юнус | Баймурза |
| 10. | Туктагол | Мухамметшах |
| 11. | Туктаргали | Таммат |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 12. | Курбангали (1789-1875) указной азанчи | Сафаргали (1763 г.р.) заруряд хорунжий | Нурмухаммет |
| 13. | Нигматзян (1825 г.р.) указной мулла | Мухаметгали (1787–1850 гг.) | Биккиня (1787-1857 гг.) |
| 14. | Ахмуд (1852 г.р.) | Габдулвали, (1824 г.р.) | Фархитдин (1826 г.р.) |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 15. | Сабирзян (1890-1971) | Гандалиф (1893-1969) | Ахмет (1864-1938) основатель Сарайлинской светской школы | Шайхетдин (1854-1941 гг.) |
| 16. | Наиль (1930 г.р.) | Фануз (1935 г.р.) | Абубакир (1906-1986 гг.) | Ахкаметдин (1895-1993гг.) |
| 17. | Айрат | Ильмир (1967 г.р.) | Альберт Галеев (1940 г.р.) директор Института космических исследований РАН, академик РАН | Байза (1919 г.р.) муж – Агзам Сулейманов |
| 18. | | Алимбек (2002 г.р.) | 1)Рустем, (1970 г.р.,) 2)Альберт ( 1973 г.р. ) | Рифкат |

## Ҡәнзәфәр бейҙең Ҡоҙаш улы буйынса шәжәрәһе




| | | |
|---|---|---|
| 3. | Янбакты,князь | |
| 4. | Корьмал-бий | |
| 5. | Колсар-бий | |
| 6. | Амангильде-бий | |
| 7. | Токой-бий | |
| 8 | Тават-бий | |
| 9. | Салташхан-бий | |
| 10. | Суяргул | |
| 11. | Курбангул, походный старшина | |
| 12. | Ахмер (1735 – 1813), старшина Чуби–минской волости | |
| 13. | Мухаррим (1780–1858), указной мулла | |
| 14. | Афрапим (1826-1893) | Масалим(1804 г.р.) |
| 15. | Шарафелислам, сотник (1868-1913) | Салимзян (1830 г.р.) |
| 16. | Гайнислам (1908-1942) | Ахметзян (1873-1919 гг.) |
| 17. | Раис (1932 г.р.) | Рахматзян (1902-1993 гг.) |
| 18. | Гузель (1958 г.р.) (дочери Чулпан и Гульназ 1989 г.р. сын Айрат 1984 г.р. Ильдар, 1966 г.р.(сын Аскар 1989 г.р., дочь Радмила 1991 г.р.) | Герольд (1928 г.р.) Раиса(1931 г.р.) (сын Владимир1966 г.р.) |
| 19. | | Сергей (1959 г.р.) Светлана (1972 г.р.) |
| 20. | Сын Айрата Айнур (2006 г.р.) | Сын Светланы Ярослав (1989 г.р.) |

Р.Ғ.Ҡорбанғолов төҙөнө.

МеҢ ырыуы башҡорттары шәжәрәһе, рәүиз яҙмалары, шулай уҡ Болошлы мәктәбе музейы (етәксеһе — тарих уҡытыусыһы Р.Р.Ғүмәров) материалдары файҙаланылды.